**Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение**
**средняя общеобразовательная школа с.Нугуш**
**муниципального района Мелеузовский район**
**Республики Башкортостан**

| | | |
|---|---|---|
| **РАССМОТРЕНО** | **СОГЛАСОВАНО** | **УТВЕРЖДАЮ** |
| на заседании ШМО | | |
| Протокол № 1 | Зам.директора по УР | Директор МОБУ СОШ с.Нугуш |
| ____ Кинзябулатова Г.В. | __________ Занкина Н.В. | __________ Габбасова Г. Ш. |
| «27» августа 2020г. | | Приказ № 83 от 28.08.20 |
| | «28» августа 2020г. | «28» августа 2020г. |

# Рабочая программа
# по родному (башкирскому) языку
# для 1 – 4 классов
## Уровень образования: начальное общее образование
## Срок реализации: 2020-2024гг.


**Составители:**
учителя башкирского языка и литературы
Габбасова Р.М.
Ямансарина М.Д.
Габбасова Г.Ш.


**2020**

## I. Уҡыу предметын үҙләштереүҙең планлаштырылған һөҙөмтәләре

**Шәхси һөҙөмтәләр:**

- телде халыҡтарҙың милли ҡомартҡыһы, мәҙәни байлығы итеп ҡабул итә;
- башҡорт теленең рус теле менән бер рәттән республиканың дәүләт теле һәм кешеләр менән аралашыу ҡоралы икәнлегенә төшөнә;
- туған телдә яҙа һәм һөйләй белеү кешене мәҙәни яҡтан билдәләүсе күрһәткес икәнлеген аңлай;
- башҡорт телендә һөйләшеү һәм аралашыу кимәле буйынса үҙ-үҙенә баһа бирергә өйрәнә.

**Метапредмет һөҙөмтәләре:**

- башҡорт телендә яңғыраған телмәрҙе (ололарҙың, тиҫтерҙәренең һөйләүе, балалар өсөн радио һәм телевизион тапшырыуҙар, компьютер саралары аша бирелгән текстарҙы һ.б.) таный, аңлай, тейешенсә ҡабул итә белә;
- программа сиктәрендә башҡортса яҙылған һүҙҙәрҙе, ижектәрҙе, өндәрҙе, өндәр теҙмәһен дөрөҫ әйтә, уҡый, улар менән һөйләмдәр төҙөй ала;
- үтелгән орфография һәм пунктуация ҡағиҙәләрен һаҡлап, үҙ аллы йәки уҡытыусы ярҙамында өйрәнеү һәм тикшереү характерындағы яҙма эштәрҙе башҡара;
- телдән һәм яҙма рәүештә ҡотлау, саҡырыу ҡағыҙы, хат төҙөй белә;
- уҡыу эшмәкәрлегенә бәйле ябай ғына һөйләмдәр менән үҙ фекерен әйтә һәм үҙенең дөрөҫлөгөн иҫбатлай ала;
- эшен үҙ аллы тикшереп, баһалай белеү һәләтенә эйә була;
- кроссвордтар, ребустар, йомаҡтар сисә белә.

**Предмет һөҙөмтәләре:**

- башҡорт теленең фонетик системаһының төп берәмектәрен белә: һуҙынҡы өндәрҙе тартынҡыларҙан, өндәрҙе хәрефтәрҙән айыра, һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлә, баҫым ҡуя;
- башҡорт теленең өндәрен һүҙ эсендә, һөйләмдә, аралашҡанда дөрөҫ әйтә, яҙма телмәрҙә дөрөҫ яҙа белә;
- өйрәнелгән кимәлдә өн, хәреф, һүҙ, һүҙ өлөшө, һөйләм киҫәге, ябай һөйләм кеүек тел берәмектәрен таба, сағыштыра, анализлай белә;
- тамыр һүҙҙе билдәләй белә. Һүҙ яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе ялғауҙар ярҙамында яңы һүҙҙәр төҙөй белә;
- һүҙ төркөмдәренә һорау ҡуя, уларҙың грамматик билдәләре тураһында ябай ғына төшөнсә ала;

- исемгә, сифатҡа, алмашҡа, ҡылымға, һанға программала бирелгән кимәлдә грамматик анализ эшләй белә;
- һөйләмдә эйә һәм хәбәрҙе таба белә;
- һөйләмдә эйәрсән киҫәктәрҙе таба, уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнән килеүен асыҡлай, һыҙыҡтар менән билдәләй белә;
- изложениеның һәм иншаның ябай ғына төрҙәрен яҙа белә;
- аңлатма, орфографик һүҙлектәр ҡуллана белә;
- яҙыу барышында хәрефтәрҙең, һүҙҙәрҙең яҙылышын тикшереп, хатаны төҙәтә белә;
- хәрефтәрҙе автоматик рәүештә матур һәм дөрөҫ яҙырға тырыша, үҙенең, иптәшенең яҙма эшен дөрөҫ баһалай белә.

4- се класты тамамлаған уҡыусы туған (башҡорт) телдә уҡыу предметының төп башланғыс дөйөм белем биреү программаһын уңышлы үҙләштереп, стандартта талап ителгән түбәндәге уҡыу күнекмәләренә ирешергә тейеш:

- башҡорт алфавитын кәрәкле мәғлүмәтте эҙләгәндә ҡуллана белеү;
- һүҙгә өн – хәреф анализы үткәрә белеү;
- тамырҙаш һүҙҙәрҙе таба белеү;
- Һүҙҙәргә тейешле синоним, антоним таба белеү;
- Һүҙ төркөмдәренең (исем, сифат, ҡылым, алмаш, һан)грамматик үҙенсәлектәрен билдәләй алыу;
- Һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләмде айыра белеү;
- Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен таба белеү:
- 75-80 һүҙҙән торған диктант яҙа белеү;
- 80-90 һүҙҙән торған тексты күсереп яҙа белеү;
- тексты үҙ аллы исемләй алыу;
- һөйләмдәрҙең килеү тәртибе боҙолған тексты төҙәтеп, мәғәнәүи яҡтан дөрөҫләп һөйләй, яҙа белеү.

## II.Уҡыу предметының төп йөкмәткеһе

**I класта яҙма телмәрҙең предмет йөкмәткеһе белем биреү һәм тәрбиәүи маҡсаттарға, шулай уҡ башланғыс класс уҡыусыларының йәш үҙенсәлектәренә тап килә һәм өс этаптан тора:**

### 1. Әлифбаға тиклемге осор (13 сәғәт)

Танышыу. Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр.
Һөйләмдәрҙе шартлы билдәләр ярҙамында тамғалау. Һөйләмде киңәйтеү, тулыландырыу Һөйләмдәрҙе шартлы билдәләр ярҙамында тамғалау. Һөйләмде киңәйтеү, тулыландырыу. Кем? Ҡайҙа? һорауҙарына яуап биргән һүҙҙәр.
Предметты белдергән һүҙҙәр. Һөйләмдәрҙе шартлы билдәләр ярҙамында тамғалау.
Һөйләмде тулыландырыу.
Һорау һөйләмдәге интонация.
Һүҙҙәге ижектәр. Нимә? Ҡайҙа? Ни эшләй? Һорауҙары. Һүҙ. Һүҙ моделе.
Нисә? Күпме? Һорауҙары.
1-10-ға тиклем һандар.

Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр.
Нindәй? һорауы. Нимә? һорауы.
Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр.
Һөйләмдә һүҙҙәрҙең килеү тәртибе.
Һөйләмде тулыландырыу. Өндәү һөйләмдәге интонация.  Нindәй? һорауы.
Һөйләмде тулыландырыу. Һөйләмде киңәйтеү, тулыландырыу.

2. **Әлифба осоро (14 сәғәт)**

Башҡорт теленең алфавиты. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре һәм хәрефтәре менән танышыу. Башҡорт һәм рус телдәрендә А, О, Ы, Э хәрефтәрен һәм өндәрен сағыштырыу. Үҙенсәлекле өн һәм хәрефтәрҙең дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы. Башҡорт телендә В хәрефенә фонетик анализ.

3. **Әлифбанан һуңғы осор  (6 сәғәт)**

Диалог төҙөү.
Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр.
Һүҙҙәрҙе юлдан- юлға күсереү
Тикшереү эше үткәреү.
Хаталар өҫтөндә эш.Ҡабатлау.
Йомғаҡлау. Бөтә үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**II класта яҙма телмәрҙең предмет йөкмәткеһе белем биреү һәм тәрбиәүи маҡсаттарға, шулай уҡ башланғыс класс уҡыусыларының йәш үҙенсәлектәренә тап килә.**

**“Фонетика. Орфоэпия”  ( 11 сәғәт)**

Башҡорт теленең алфавиты. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өн-хәрефтәре.
Ҡалын һәм нәҙек өн-хәрефтәренең дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы. Өн һәм хәреф.
Ҡалын һуҙынҡылар.
Нәҙек һуҙынҡылар. Тартынҡылар. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар.
Һүҙҙәрҙе юлдан-юлға күсерсеү.
Башҡорт телендә баҫым.
Ҡ, ғ тартынҡыларының сиратлашыуы.
П,б өндәренең сиратлашыуы.
Парлы тартынҡылар. Тартынҡыларҙың сиратлашыуы.
Яңғырау, һаңғырау тартынҡылар.

**“Орфография” ( 17 сәғәт)**

Яңғыҙлыҡ исемдәрҙең яҙылышы.   –мы, ме ялғауҙарының яҙылышы.
Беренсе зат, күплек ялғауы. Икенсе зат, күплек ялғауы. Өсөнсө зат, күплек ялғауы.
Ҡ, ғ тартынҡыларының сиратлашыуы. П,б өндәренең сиратлашыуы.
-лы, -ле, -ло, -лө ялғауҙары.   Е, э өн-хәрефенең  әйтелеше, яҙылышы.
-һыҙ, -һеҙ, -һоҙ, -һөҙ ялғауҙары; -ма, -мә ялғауҙары.
Һүҙҙәрҙә я хәрефенең яҙылышы.  Ю хәрефе.
Йә, йе ҡушымсаларының яҙылышы. Йо, йө ҡушымсалары.
Йү, йы ҡушымсалары.

**“Синтаксис”. “Морфология” ( 6 сәғәт)**

Һөйләм. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. Һандар. Һандарҙың яҙылышы.
Ярҙамсы һүҙҙәр.
Һөйләм Һөйләмдең баш киҫәктәре.
Һөйләмдең эйәһе. Һөйләмдең хәбәре.

**III класта яҙма телмәрҙең предмет йөкмәткеһе белем биреү һәм тәрбиәүи маҡсаттарға, шулай уҡ башланғыс класс уҡыусыларының йәш үҙенсәлектәренә тап килә.**

**“Фонетика. Орфоэпия. Графика.” ( 10 сәғәт)**

Телмәр. Һөйләү телмәре. Эске телмәр.Текст. Һүҙ. Ижек.
Төп башҡорт һүҙҙәре (сингармонизм).
Һуҙынҡы өндәр. Тартынҡы өндәр. Тартынҡыларҙың сиратлашыуы.

**“Лексика” ( 4 сәғәт)**

Күп мәғәнәле һүҙҙәр . Синонимдар.
Антонимдар. Омонимдар.

**“Синтаксис” ( 4 сәғәт)**

Һөйләм. Һөйләм төрҙәре. Һөйләмдең баш киҫәктәре.
Йыйнаҡ һөйләм. Таркау һөйләм.

**“Морфология “ ( 16 сәғәт)**

Исем. Исемдәрҙең күплек ялғауҙары.
Килеш ялғауҙары.Төп, эйәлек килештәр. Килеш ялғауҙары. Төшөм, төбәү килетәре
Урын-ваҡыт, сығанаҡ килештәре
Ҡылым. Юҡлыҡ формаһы. Заман формалары.
Ҡылымдың хәҙерге заман формаһы. Ҡылымдың үткән заман формаһы.
Сифат. Төп дәрәжәһе. Сифаттың сағыштырыу дәрәжәһе.
Сифаттың артыҡлыҡ, аҙһытыу дәрәжәләре. Алмаш.

**IV класта яҙма телмәрҙең предмет йөкмәткеһе белем биреү һәм тәрбиәүи маҡсаттарға, шулай уҡ башланғыс класс уҡыусыларының йәш үҙенсәлектәренә тап килә.**

**“Лексика” ( 7 сәғәт)**

Телмәр. Текст. Башҡорт теленең һүҙлек составы.
Күп мәғәнәле һүҙҙәр. Тамырҙаш һүҙҙәр. Ялғауҙар.

**“Синтаксис” ( 8 сәғәт)**

Өндәш һүҙ. Һөйләм. Һөйләмдең баш киҫәктәре.

Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре.  Аныҡлаусы. Хәл. Тултырыусы.

**“Морфология “ ( 19  сәғәт)**

Исемдәрҙең эйәлек заты. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Килеш ялғауҙары.
Ҡушма һүҙҙәр.  Сифат. Сифат дәрәжәләре.
Һан. Ябай һандар.  Ҡушма һандар.
Алмаш. Зат  алмаштары. Эйәлек алмаштары. Һорау алмаштары.
Күрһәтеү алмаштары.
Ҡылым. Ҡылымдың барлыҡ һәм юҡлыҡ формалары.
Ҡылымдарҙың үткән заман формаһы.  Ҡылымдарҙың хәҙерге заман формаһы.
Ҡылымдарҙың киләсәк заман формаһы.

## III. Тематик планлаштырыу

| | |
|---|---|
| 1- се класс | |
| Әлифбаға тиклемге осор | 13 сәғәт |
| Әлифба осоро | 14 сәғәт |
| Әлифбанан һуңғы осор | 6 сәғәт |
| 2 - се класс | |
| Фонетика. Орфоэпия | 11 сәғәт |
| Орфография | 17 сәғәт |
| Синтаксис. Морфология | 6 сәғәт |
| 3 - сө класс | |
| Фонетика. Орфоэпия. Графика | 10 сәғәт |
| Лексика | 4 сәғәт |
| Синтаксис | 4 сәғәт |
| Морфология | 16 сәғәт |
| 4 - се класс | |
| Лексика | 7 сәғәт |
| Синтаксис | 8 сәғәт |
| Морфология | 19 сәғәт |

Прошито, пронумеровано
и скреплено печатью
8 листов
Директор
МОБУ СОШ с. Нугуш
______________
Габбасова Г.Ш.